Тема:Мәҡәлдәр. ***Практик эш.* Ә/т.** Йомактар.Мәҡәлдәр тураһында төшөнсә.
Маҡсат:
Үҫтереүсе:тасуири уҡыу,логик фекерләү,текст менән эшләү күнекмәһен үҫтереү.
Белем биреүсе:мәҡәлдәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү;ХИ,мәҡәл т-да төшөнсәләрен аңлау.
Тәрбиәләүсе:белем алыуға,уҡыуға ынтылыш уятыу,хи-на ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.
Дәрес тибы: Яңы белем үҙләштереү

| **Уҡытыусының эшмәкәрлеге** | **Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге** | **УУЭ** |
|---|---|---|
| | **1.Ойоштороу этабы** | |
| Сәләмләү.<br>1.Психологикик комфорт атмосфераһын булдырыу.<br>2. Артикуляцион күнекмәләр . | Сәләмләү. Һаумыһығыҙ,уҡыусылар!Мин һеҙҙе күреүемә шатмын! Кәйефтәрегеҙ нисек? Тимәк, еҢ һыҙғанып эшкә тотонорға ла була. Балалар, китап, дәфтәр,ручка, көндәлектәр бөтәһе лә дәрескә әҙерме? Афарин, һәр ваҡыт башҡа дәрестәргә лә шулай теүәл итеп әҙерләнеп йөрөйһөгөҙ тип уйлайым. | Эш урындарын ойоштора,әңгәмәгә әҙерләнә. |
| | **2.Өй эшен тикшереү. Актуалләштереү.** | |
| 1.Уңыш ситуацияһын ойоштороу<br>Дәресте тел шымартыу менән башлайыҡ.<br>2Таҡтаға ҡарағыҙ әле, халыҡ ижадына<br>ниндәй төрҙәр ҡарай? ( Әкиәт)<br>- Ә һеҙ әкиәттәр яратаһығыҙмы? Әкиәттәр ниндәй төрҙәргә бүленә?<br>Эйе, дөрөҫ. Ә бына икенсе төркөм- йомаҡтар.<br>Ә һеҙ йомаҡтар беләһегеҙме? Мин һеҙгә бер нисә йомаҡ әйтәм, ә һеҙ яуабын табығыҙ: | Фонетик күнегеүҙәр.<br>- Балалар таҡтаға ҡарағыҙ әле. Бында тел көрмәлдергестәр бирелгән.<br><br>( хайуандар тураһында, батырҙар тураһында, тормош- көнкүреш рураһында әкиәттәр)<br>- Йомаҡтар – йөкмәткеһе буйынса яуабы уйлап табылырға тейеш булған образлы һөйләм. Ул башваҡыс йә һорау һөйләм рәүешендә була.<br>1) Башы тараҡ, ҡойроғо ураҡ.( әтәс)<br>2) Әйтәйем һиңә бер йомаҡ:<br>Ҡышын һоро, йәйен аҡ,<br>Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ.(ҡуян) | **1Регулятив УУЭ**<br>Һүрәттәр,мәҡәлдәр аша тема,маҡсатты билдәләү,эш планын төҙөү план<br>**2.Коммуникатив УУЭ -** әңгәмә ҡора белеү, икенсе кешенеҢ фекерен тыңлап аңлау |
| | **3. Маҡсат,бурыстар ҡуйыу. Беренсел үҙләштереү** | |
| -Халыҡ ижадын икенсе төрлө тағын нисек атайҙар, кем белә?<br>(фольклор)<br>Эйе, халыҡ фольклоры, тиҙәр, дөрөҫ.<br>( таблицаны ҡарап үтеү, афористик жанрҙар тураһында һөйләү)<br>- Уҡыусылар, ә һеҙ мәҡәлдәр беләһегеҙме?<br>-Мәҡәлдәр һайлайыҡ. | -Афористик жанрҙар тип икенсе төрлө бәләкәй жанрҙарҙы әйтәләр. Улар ритмик яҡтан ныҡ ойошҡан, бер йәки бер нисә һөйләмдән торған, әммә тәрән мәғәнәгә эйә булған ижад төрө. Бөгөнгө дәрестә афористик жанрҙарҙың бер төрө - мәҡәлдәргә туҡталабыҙ.<br>**<u>Төркөмдәрҙә эшләү.</u>**Йәгеҙ, кемдәр әйтә?<br>(уҡыусыларҙың яуабы тыңлана)<br>Мәҡәл- боронғолар һүҙе рәүешендә бирә.Мәҫәлән, атайҙар малайҙарға эшкә өйрәткәндә: "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тиҙәр. Өй эштәрен эшләгәндә , мәсьәлә килеп сыҡмаһа: " Уйла әле, ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", тиҙәр. Мәҡәлдәр бик күп төрлө мәсьәләләргә арнала ( Компьютер) Таҡтаға ҡарағыҙ әле, мәҡәлдәр ниндәй төркөмдәргә | **1Регулятив УУЭ** -эш планын төҙөү план<br>план б-са эшләү<br>**2.Коммуникатив УУЭ -** әңгәмә ҡора белеү, икенсе кешенеҢ фекерен тыңлап аңлау<br>**Танып белеү УУЭ** әкиәт т-да төшөнсәне аңлау,төрҙәрен белеү;<br>**4.Шәхескә йүнәтелгән УУЭ** Белемгә ынтылыш,хеҙмәт ,белем аша тормошта үҙ урыныңды табырға мөмкин икәнлеген аңлау; |

| | | |
|---|---|---|
| **1.Ял минуты.**<br>Башҡорт һәм рус мәкәлдәренең парҙарын табығыҙ.<br>**ярыш ойошторабыҙ.**<br>-Афарин, уҡыусылар. Һеҙ бик күп мәкәлдәр беләһегеҙ икән. Бына бергәләшеп, кәңәшләшеп эшләгәс, еңеүгә лә ирештегеҙ. “ Күмәк көс яу ҡайтара”, ти халыҡ. “Берҙәмлектә -көс”, тип тә әйтә. Бына һеҙҙең көс берҙәмлектә икәне күренә инде | бүленгән?<br>**Парлы эш.**<br>Мәкәлдәрҙе төркөмләйҙәр. - Мәкәлдәр рус халыҡ ижадында ла ҡулланыла. Оҡшаш мәғәнәле мәкәлдәр ҙә осрай. ( компьютерҙа)<br>Ике команда:<br>1-се команда “Тырыштар”,<br>2-се команда “Уңғандар”..<br>Кем күберәк мәкәлдәр белә?<br>тәүҙә 1 команда әйтә,<br>2-се команда яуап бирә, еңеүселәр билдәләнә.. | |
| **6. һығымта** | | |
| . -Әгәр ошо кроссвордты дөрөҫ сисһәгеҙ, һеҙ тылсымлы һүҙ уҡырһығыҙ. | 1,Әкиәттәр, мәкәлдәр, легендалар, йомаҡтарҙы кем уйлап сығарған? (халыҡ)<br>2,” Һүҙ сәнҡәтенең башы .... (нимәлә?)”, тигән М. Горький.(фольклорҙа)<br>3 Мәкәлдәр төҙөлөшө ягынан тәрән мәғәнәле һәм ... ( ниндәй?). ( ҡыҫҡа)<br>4, Мәкәл, йомаҡ, тиҙәйткес, һынамыштарҙы халыҡ ижадының ниндәй жанры тип йөртәләр?( афористик)<br>5, Үҙ ... – алтын бишек.( илем)<br>6, Егет кешегә етмеш төрлө ... ҙә аҙ.( һөнәр) | **Танып белеү УУЭ** – текстан кәрәкле мәғлүмәт таба алыу оҫталығы,<br>**Шәхескә йүнәтелгән УУЭ**<br>Белемгә ынтылыш<br>**Регулятив**<br>Үҙ эшмәкәрлектәрен тикшерә,күҙәтә,төҙәтә белеү |
| **7. Өйгә эш,аңлатма биреү** | | |
| Инструктаж бирә. | 1 мәкәлдәр  яҙ икешәр-русса.<br>2.ятлап кил.<br>3. Мәкәлгә хикәйә уйла. | |
| **8. Рефлексия .** | | |
| Таҡтаға кәрәкле һорауҙарҙы яҙа. | Дәрескә баһа<br>Кәйефтәрен асалар<br>Эштәрен баһалайҙар | **Регулятив**<br>үҙ эшмәкәрлегендә дәрестең маҡсаты менән сағыштыра белеү, хаталарҙы табыу һәм төҙәтеү, үҙ-үҙендә,класташтарыңды баһалау. |

Ҡышҡы уйындар. *Һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөү һәм уҡыу.*
*Текст төҙөп күсереп яҙыу.*
*Тышта (холодно).Әммә (дети) һыуыҡтан ҡурҡмайҙар.Улар рәхәтләнеп (на улице  играют.) Бөтәһенә лә(весело).Берәүҙәр (на льду) конькиҙа (катаются),икенселәре (с горы)шыуалар.Айнур менән Азат (на лыжах)йөрөйҙәр.Ҙурыраҡ(мальчики) хоккей (играют.)Сания менән Тәнзилә лә (красивые)саналарын һөрәп (пришли).Уларға (щенок по кличке Акбай)эйәргән.Тышта (весело).*

Ҡышҡы уйындар. *Һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөү һәм уҡыу.*
*Текст төҙөп күсереп яҙыу.*
*Тышта (холодно).Әммә (дети) һыуыҡтан ҡурҡмайҙар.Улар рәхәтләнеп (на улице  играют.) Бөтәһенә лә(весело).Берәүҙәр (на льду) конькиҙа (катаются),икенселәре (с горы)шыуалар.Айнур менән Азат (на лыжах)йөрөйҙәр.Ҙурыраҡ(мальчики) хоккей (играют.)Сания менән Тәнзилә лә (красивые)саналарын һөрәп (пришли).Уларға (щенок по кличке Акбай)эйәргән.Тышта (весело).*